*Наилә ЗАКИРОВА*

# ТЫЛСЫМЛЫ МОҢ

Йырҙарыңды һинең тыңлағанда
Йөрәгемә минең моң тула.
Күңел ярһый яҙғы ташҡын кеүек,
Тормош ваҡлыҡтары онотола,

тип яҙған 1943 йылдың февралендә шағир Ҡадир Даян йырсы Хәбир Ғәлимовтың таланты алдында баш эйеп. Ысынлап та, сәнғәтебеҙ тарихында беренсе милли опера солисы булып танылған күренекле йырсы аһәңле моңо менән бик күптәрҙе әсир итте.



*Хәбир Ғәлимов*

Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Хәбир Латип улы Ғәлимов 1905 йылдың 5 февралендә Салауат районының Лағыр ауылында донъяға килгән. Үҫмер саҡта уҡ етем ҡалған Хәбиргә бер нимә лә еңел бирелмәй: уға ауылдың хәллерәк кешеләренә ялланып көтөү көтөргә лә, мал ҡарарға ла, утын-бесән әҙерләргә лә тура килә. Эш араһында йырлап алырға ярата егет. Әммә профессиональ йырсы булыу юлында уны байтаҡ һынауҙар көтә. Башҡортостан Республикаһының Үҙәк дәүләт тарихи архивындағы шәхси фондында һаҡланған документтар быны асыҡ күрһәтә. Тупланған материалдар, фотоһүрәттәр Хәбир Ғәлимовтың бай һәм күп яҡлы ижад юлы, уның башҡорт сәнғәтенә, милли мәҙәниәтенә индергән тос өлөшө тураһында һөйләй.

Талантлы егет 1927 йылда Ҡыҙыл Армия сафына алынғас та йыр-моңдан айырылмай: һалдаттар араһындағы үҙешмәкәр түңәрәктәргә әүҙем йөрөй, концерттарҙа йыш ҡатнаша. Тырыш, һәләтле егетте ваҡытынан алда, 1929 йылда демобилизациялап, Өфө театр техникумының театр бүлегенә уҡырға ебәрәләр. 1932 йылда уҡыуҙы тамамлаған Хәбир Башҡорт драма театрында эшләй башлай. Шул уҡ йылда театр ҙур гастролдәр менән Ҡазанға бара. Йомғаҡлау концерттарында Хәбир Ғәлимовҡа мәшһүр Ғәзиз Әлмөхәмәтов менән бергә ҡатнашыу бәхете тейә. Йәш йырсының уңышлы сығышын билдәләп, Ғәзиз Әлмөхәмәтов уға профессио-

наль оҫталығын камиллаштырыу, опера нескәлектәрен тәрәнерәк өйрәнеү өсөн артабан уҡырға кәңәш бирә. Башҡортостандың классик вокал сәнғәтенә нигеҙ һалыусының ихлас һүҙҙәре егеткә дәрт өҫтәй. Хәбир Мәскәү консерваторияһы эргәһендә 1932 йылда ойошторолған башҡорт студияһына уҡырға инә, профессор Николай Иванович Сперанский класында шөғөлләнә. 1938 йылда ошо студияны тамамлаған туғыҙ кеше араһында Хәбир Ғәлимов та була.



”Аршин мал алан” спектакленән күренеш

Мәғлүм булыуынса, 1938 йылдың 14 декабрендә Өфөлә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры асылыу тантанаһы үтә. Унда йыйылыусыларҙы тәбрикләп, РСФСР Халыҡ комиссарҙары советы эргәһендәге Сәнғәт эштәре буйынса идаралыҡ вәкиле Ральф: ”Ошоға тиклем Рәсәйҙә 415 театр иҫәпләнә ине. Бөгөн 416-сы театр тыуыуын күрәбеҙ. Һеҙҙең театр — РСФСР-ҙа тәүге милли опера театры”, — тип билдәләй. Тантана Паизеллоның ”Тирмәнсе һылыу” операһы менән асыла. Унда йәш солист Хәбир Ғәлимов Барон партияһын башҡара. Шулай итеп, Рәсәйҙең тәүге милли опера театры сәхнәһендә беренсе милли опера йырсыһы сығыш яһай.

Хәбир Ғәлимов башҡорт композиторҙары операларында төп партияларҙы тәүләп башҡарыусы булараҡ билдәле. Мәҫәлән, тәүге милли опера — Мәсәлим Вәлиевтың ”Һаҡмар”ында Юлай партияһын уңышлы башҡара.

1955 йылда Мәскәүҙә башҡорт мәҙәниәте һәм сәнғәте көндәрендә Заһир Исмәғилевтың ”Салауат Юлаев” операһында Салауат партияһын ҙур уңыш менән башҡарып, ул тәнҡитселәрҙең дә, тамашасыларҙың да оло баһаһына лайыҡ була. Батыр яҡташы Салауат образын опера сәхнәһендә иң беренсе булып кәүҙәләндереүе менән Хәбир ағай Ғәлимов ғүмере буйына ғорурлана. Ә опера сәхнәһендә ул башҡарған партиялар бихисап: ”Карлуғас”та — Шатморат, ”Мәргән”дә — Мәргән, ”Аршин мал алан”да — Асҡар, ”Аҡбуҙат”та — Тарауыл һәм башҡалар. Нindәй генә партиялар башҡармаһын, Хәбир Ғәлимов үҙенә тоғро булып ҡала — тыңлаусыға образдың бөтә нескәлектәрен йыр аша мөмкин тиклем тулыраҡ алып барып еткереү.

1955 йылда Башҡорт дәүләт филармонияһына эшкә күскәс, йырсының аудиторияһы тағы ла киңәйә: уны хәҙер ҡалаларҙа ғына түгел,



*Хәбир Ғәлимов башҡорт композиторҙары менән*

була. Бөгөн йәнгә ят, әҙәпһеҙ тауыштар ғәжәп ишәйеп китте. Был инде илһамдың ниндәй ерлектән, ниндәй сығанаҡтан килеүенә бәйләнгән. Хәбир ағай илһамын халыҡ рухынан, уның бөйөк ижади ҡаҙаныштарынан алды. Хәбир Ғәлимовҡа Ғәзиз Әлмөхәмәтов үҙе фатиха бирҙе һәм эстафета тапшырҙы. Был фатиха артабан Мәғәфүр Хисмәтуллинға һәм Радик Гәрәевкә күсте. Ошо дүртәү йыр сәнғәтендә йылтыр һары ҡалайҙан ҡырҡып епкә теҙелгән замана йондоҙҙары түгел, ә күктең үҙендә яралып балҡыған ҡеүәтле яҡтыртҡыстар булды. Хәбир ағай башҡарған опера партияларын, халыҡ көйҙәрен, композиторҙарыбыҙ ижад иткән йырҙарҙы күп тыңларға тура килде. Публика алдында ярамһаҡланып, уға нисек тә оҡшарға тырышып, ул бер ваҡытта ла бөйөк талантын кәмһетмәне. Үҙ ғүмерендә ул минең һүҙҙәремә яҙылған бер генә йырҙы — Хөсәйен Әхмәтовтың ”Ғүмер тураһында баллада”һын башҡарҙы. Әммә был минең өсөн ҙур бүләк һәм ҡәҙерле иҫтәлек булды. Хәбир ағайҙың йорто йомарт, ҡунаҡсыл ине. Заһир Исмәғилев менән беҙ ул ғаиләнең һый-хөрмәтен байтаҡ күрҙек. Ошо хөрмәт өсөн рәхмәт тойғоларын әлегәсә һаҡлайым”.

*Мостай Кәрим.*

ауылдарҙа ла тыңларға мөмкинлек тыуа. Башҡорт халыҡ йырҙарын үҙенсәлекле башҡарыусы булараҡ, тәбиғәттән бирелгән ҡабатланмаҫ тауышы аша Хәбир ағай ”Буранбай”, ”Сибай”, ”Ғилмияза”, ”Урал”, ”Әрме” кеүек эпик көйҙәрҙең дә, ”Шәүрә”, ”Зөлхизә”, ”Сәлимәкәй” кеүек лирик, ”Ҡара тауыҡ”, ”Ялсығол” кеүек шаян йырҙарҙың да асылын күрһәтеүгә ирешә. Уның һәр сығышын халыҡ күтәреп ала, алҡышлап оҙата. Хәбир ағай замандаштары хәтерендә талантлы йырсы ғына түгел, кешелекле, киң күңелле, йомарт һәм юғары әхлаҡлы шәхес булып иҫтә ҡалған.

Төрлө йылдарҙа уға ҡарата әйтелгән һүҙҙәр, уға арнап яҙылған шиғырҙар бар. Шуларҙың бер нисәһен тәҡдим итәбеҙ.

”Хәбир Ғәлимов... Уның моңло һәм әҙәпле тауышы бынан алтмыш йылдар әүәл минең күңелемә һеңде. Минеңсә, һүҙҙең генә түгел, тауыштың да әҙәплеһе һәм әҙәпһеҙе

”Хәбир Ғәлимовты мин һәр саҡ ныҡ ихтирам иттем. Ул башҡорт сәнғәтенә тоғро хеҙмәт итте. Уның йырлау манераһын яратам. Халыҡ күңелен, халыҡ моңон нисек тәрән итеп асып бирә ул ”Урал”, ”Ҡолой кантон”, ”Ғайса”, ”Сибай”, ”Зөлхизә” кеүек оҙон йырҙарҙа. Минең ”Салауат Юлаев” исемле опeрамда ла ул төп ролде башҡарып, ҙур уңыштарға иреште. Шундай тәрән лиризм менән ул минең ”Былбылым” йырын йырланы. Күп кенә романстарым, йырҙарым да уның башҡарыуында тәүләп сәхнәгә сыҡты”.

*Композитор Заһир Исмәғилев.*

”Хәбир Ғәлимов башҡорт халыҡ йырҙарын, композиторҙарыбыҙ әҫәрҙәрен пропагандалауға күп көс һалды... Мин үҙемдең ”Ғүмер тураһында баллада”мды яҙғанда уны Хәбир Ғәлимовҡа бирәсәгемде белә инем. Уның менән беҙ күптән, Мәскәү консерваторияһында уҡыған саҡтан уҡ дуҫбыҙ. Хәбир Латып улы минең һәм башҡа башҡорт композиторҙарының йырҙарын тәүләп башҡарыусы булды”.

*Композитор Хөсәйен Әхмәтов.*

”Хәбир Ғәлимов — беҙҙең опера сәнғәтебеҙҙең тәүге ҡарлуғасы... Уның тураһында һөйләгәндә йырсының уҡытыусыһы — атаҡлы йырсы һәм композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтовты хәтергә алмай булмай. Сөнки ул йәш егеттең талантын беренселәрҙән булып күргән һәм баһалаған, ҙур эштәргә фатиха биргән. Ике йырсы ла — беҙҙең милли сәнғәтебеҙҙең ғорурлығы”.

*Шағир Сафуан Әлибаев.*

Ә Рәми Ғарипов яҡташы Хәбир ағай Ғәлимовҡа булған хистәрен шиғыр юлдарына һалған:

Әй, һайрай ҙа һуң был
һабантурғай,
Ҡарҙар бөткәнен дә көтөп
тормай.
Һабансылар күңелен
нурлай-нурлай,
Һай, һайрай ҙа һуң был
һабантурғай.

Йә атылып күккә менә уҡтай,
Йә йомолоп ергә төшә туптай.
Ерҙе күккә әйҙәп яна уттай,
Ҡасан был еҙ шөңгөр ялға
туҡтай?

Ҡанатынан яҙҙы түгә буғай —
Яҙға ҡойона бер ялан-туғай.
Түгелдер был, ахыры,
һабантурғай,
Хәбир ағайым, ахыры, шулай
йырлай.

Хәбир Латип улы Ғәлимов сәнғәте, таланты, йырҙары менән халыҡҡа дәрт, нур өҫтәп йәшәне. Йырсы менән уны тыңлаусылар, музыка һөйөүселәрҙе һәр саҡ күҙгә күренмәй торған ептәр бәйләне. Был турала Хәбир ағай заманында үҙе былай тигән: ”Тауыш — минең хеҙмәт ҡоралым. Мин халыҡҡа сәнғәт менән хеҙмәт итәм. Ә сәнғәт — халыҡтыҡы. Шулай булғас, минең тауышым да халыҡтыҡы ул! Әгәр мин тауышымды һаҡламаһам, хеҙмәт ҡоралымдан яҙыр инем, халҡым алдында ҙур ғәйепле булыр инем”. Нәҡ ошо һүҙҙәр мәшһүр йырсының асылын күрһәтә лә инде.